ULUSLARARASI TÜRK LEHÇE ARAŞTIRMALARI DERGİSİ (TÜRKLAD), 1. CİLT, 2. SAYI, 2017, 25-46. s., TÜRKİYE

# “УРАЛ БАТЫР” БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЭПОСЫНЫҢ ПОЭТИКАҺЫ

*Gölnar YULDIBAYEVA*[*]


### Аннотация

Статья “Урал-батыр” башҡорт халыҡ эпосының поэтикаһын өйрәнеүгә арналған. Боронғо мифологияға нигеҙендә тыуған “Урал-батыр” эпосы башҡорт халҡының ғына түгел, ә бөтә донъя мәҙәниәтенең ҡиммәтле рухи хазинаһы ул. Эпос йөкмәткеһе тәү сиратта уның сюжетында, ерҙәге мәңгелек йәшәйеш, тыныслыҡ, муллыҡ, яҡшылыҡ өсөн көрәш идеяларында сағылыш ала.

Уның тәрән идея йөкмәткеһе халыҡ фантазияһы менән сәнғәтсә үрелеп бирелеп, күп төрлө һүрәтләү алымдары, йәғни эпос стиленә яраҡлашҡан күп һанлы поэтик ҡабатлауҙар, ҡатмарлы сағыштырыуҙар, эпитеттар, гиперболалар, метафоралар менән биҙәлгән. Эпос поэтикаһы ситуациялар, мотивтар, бер төр поэтик алымдар, тасуири саралар, символдар ҡабатланышы менән иркен иш итә.

“Урал батыр”ҙағы теге йәки был һүрәтләү сараһы ул үҙмаҡсат, телде биҙәү өсөн генә ҡулланылған һүҙ түгел, ә эпостың идея йөкмәткеһен, образдарын тәрәнерәк һәм анығыраҡ асыу, артабанғы үҫешен күрһәтеү өсөн ярҙам итә. Башҡорт халыҡ эпосының ҡайһы бер поэтик үҙенсәлектәрен генә өйрәнеү ҙә, уның классик эпостар традицияһында барлыҡҡа килеүен дәлилләй ала.


**Асҡыс һүҙҙәр:** Башҡорт халыҡ эпосы, Мифология, Халыҡ ижады, Поэтика, Сағыштырыуҙар, Эпитеттар, Гипербола, Фольклор.

## URAL-BATIR BAŞKURT HALK DESTANININ POETİKASI


### Özet

Makalede Başkurt halk destanı Ural-Batır’ın poetikası ele alınmaktadır. Eski mitolojik köklere sahip olan Ural-Batır destanı yalnız Başkurt halkının değil, tüm dünya medeniyetinin kıymetli ruhi hazinelerinden biridir. Destanın içeriğinde öncelikle yeryüzündeki ebedî yaşam, barış, bolluk, iyilik için mücadele fikirleri yansıtılmaktadır.

Destanın derin fikrî içeriği, halkın hayal gücü ile sanatkârane bir şekilde örülüp verilerek çeşitli tasvirî yollar, yani destan tarzına uyarlanan çok sayıda poetik tekrarlar, çetrefilli karşılaştırmalar, sıfatlar, mübalağalar, metaforlar ile süslenmiştir. Destan poetikası durumlar, motifler, çeşitli poetik usuller, tasviri vasıtalar, sembollerin tekrarlanmasıyla rahat ifade imkânı sağlıyor.

“Ural-Batır”daki bu tasvirî usullerdeki amaç, yalnızca dilde kullanılan bir süsleme aracı değil, aynı zamanda destanın fikrî içeriğinin, görünümlerinin daha derin ve daha anlaşılır olmasına, arka plandaki gelişimi göstermesine de yardım etmektedir. Başkurt halk destanının herhangi bir poetik özelliğini öğrenmek bile onun klasik destan geleneğinde ortaya çıktığını ispat etmeye yetiyor.


**Anahtar Kelimeler:** Başkurt Halk Destanı, Mitoloji, Halk İcadı, Poetika, Karşılaştırmalar, Sıfatlar, Mübalağa, Folklor.

[*] Yrd. Doç. Dr., Rusya Bilimler Akademisi, Ufa Bilim Merkezi Tarih, Dil ve Edebiyat Enstitüsü, Halk Bilimi Bölümü, RUSYA, el-mek: nargul1976@list.ru

## POETICS OF THE BASHKIR FOLK EPIC "URAL-BATYR"

**Abstract**

The article is devoted to the study of the poetics of the Bashkir folk epic "Ural-batyr".

"Ural-batyr", created by the genius of the people on the basis of ancient mythology, is an invaluable monument not only of Bashkir but also of world culture. It reflects the ideas of the eternity of life and peace on earth, the idea of prosperity, the idea of the victory of light over darkness, the triumph of good over evil.

The high artistic merits of the epic, the heroic character of the content, are expressed in poetic language and epic style. The style of the Bashkir epic is characterized by numerous repetitions, epic formulas, complex comparisons, constant epithets, hyperboles, metaphors. Means of figurative expressiveness, used in the epic, are not simple ornaments, but stem from the inner needs of folk tales, from the general requirements of epic imagery.

All the artistic means used in the epic "Ural-batyr" bear a certain burden in the disclosure of certain aspects of the events described. And consideration of even some of the artistic features of the epic allows us to assert that this work was created in the best traditions of the classical epic.

**Key Words:** Bashkir Folk Epic, Mythology, Folk Art, Poetics, Comparisons, Epithets, Hyperbole, Folklore.

«Урал батыр» – башҡорт халыҡ эпик ҡомартҡыларының иң алдында торған юл башы, иң боронғо поэтик хәтер ебе, иң архаик ҡарыһүҙ фекер рәүеше, фантастик уй-хыял ҡаҙнаһы, иң ҡәҙимге тасуири һүҙ, һүрәттәр төйөнө»[1]. Эпос йөкмәткеһе тәү сиратта уның сюжетында сағыла. Шуның өсөн һүрәтләү сараларын сюжет ситуацияларынан, мотивтарҙан айырмайынса ҡарарға һәм уларҙың функцияһын билдәләргә кәрәк. Уның тәрән идея йөкмәткеһе халыҡ фантазияһы менән сәнғәтсә үрелеп бирелеп, күп төрлө һүрәтләү алымдары, йәғни эпос стиленә яраҡлашҡан күп һанлы поэтик ҡабатлауҙар, ҡатмарлы сағыштырыуҙар, эпитеттар, гиперболалар менән биҙәлгән. Эпик ҡобайыр поэтикаһы ситуациялар, мотивтар, бер төр поэтик алымдар, тасуири саралар, символдар ҡабатланышы менән иркен иш итә. Мәҫәлән, Урал батырҙың бер-бер артлы ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығыуы, алыш картиналары, йәшәү, үлем, йола һ.б. мотивтарҙың даими ҡабатланып килеүе, бер-береһенә оҡшаш ваҡиғалар, хикәйәләүҙәге тавтологиялар – былар барыһы ла шуны раҫлай итә.

Сәсәндәр идеаль геройҙы һүрәтләгәндә иң сағыу биҙәктәрҙе ни хәтлем күберәк ҡулланһалар, аждаһа-дейеүҙәр, уларҙың батшалары, һатлыҡ Шүлгән образдарын кәүҙәләндергәндә лә, төрлө саралар ярҙамында был персонаждарҙы уҡыусы өсөн нәфрәт тойғоһо уятырлыҡ итеп күрһәтеүгә ирешкәндәр.

Эпостың жанр үҙенсәлектәрен барлап ҡарағанда, әҫәрҙең шиғыр төҙөлөшөндә лә, тел-һүрәтләү саралары ҡулланылышында ла ***кобайыр стиле*** закондары һаҡланған. Бер яҡтан ҡарағанда, эпосты фантастик роман йәиһә драматик поэма тип атарға ла ерлек бар. Драматик поэма, сөнки эпоста диалог һәм монолог берҙәм үрелеп килеп йөкмәткене аса.

Эпостың башы традицион әкиәт алымын хәтерләтә:

«Борон-борон-борондан,

Кеше-маҙар булмаған,

[1] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы/Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап, 2003. – 207-се б.

Килеп аяҡ баҫмаған

У тирәлә ҡоро ер

Барлығын һис кем белмәгән,

Дүрт яғын диңгеҙ ураҡкан

Булған, ти, бер урын»[2].

В.М.Мокиенко билдәләүенсә: «башланғыс формула әкиәтсегә беренсе сиратта тыңлаусыны ваҡыт һәм арауыҡта билдәләү өсөн кәрәк»[3]. Бынан һуң әҫәр төп персонаждар менән таныштырыуҙы дауам итә. Йәнбирҙе ҡарттың образы күберәк уның уландарына һөйләгән тәрбиәүи телмәрҙәре аша бирелһә, уландары Шүлгән менән Уралдың холоҡ-фигелдәре, ҡылған ҡылыҡтары, эшләгән эштәренә ҡарап, эпос буйына асылып бара.

Эпостың аҙағы ла әкиәт тамамланышы менән ауаздаш:

«Былар халыҡты йыйғандар,

Дүрт батырға бүлгәндәр;

Дүрт йылғаны буйлатып,

Торлаҡ ҡороп таралып,

Айрым торлаҡ ҡорғандар.

Дүрт батырҙың исеме

Дүрт йылғаға ат булған,

Онотолмаҫ зат булып,

Быуын-быуын ҡалғандар»[4] –

тип, оптимистик рухта тамамланып ҡуя. Текста, бер яҡтан ҡарағанда, әкиәт стиле көслө кеүек, әммә әкиәт – прозаик жанр, ә «Урал батыр» эпосы - шиғри формала ижад ителгән эпик әҫәр. Уның стиле - поэтик стилгә көйләнгән шиғри юллы, 7-7 ижеккә нигеҙләнгән ритмик үлсәүле, рифмалы теҙмә (эпик ҡобайыр стиле). «Был стиль ҡобайыр шиғыры менән яҙылышы, ҡобайырға хас поэтикаһы, традицион поэтик формулалары, дөйөм урындары, эпиклығы менән ғәҙәттә бер планлы ябай сюжеты, бер нисә типик мотив һыҙығы, ситуациялар оҡшашлығы, хикәйәләү һөрөлөшө, башлыса композицион-структур төркөмдәрҙән ойошоуы һәм башҡа хосусиәтле поэтик һыҙаттары менән характерлана»[5]. Күренекле Рәсәй ғалимдарының береһе Е.М. Мелетинский билдәләүенсә, эпик әҫәрҙәрҙә «теҙмә һәм сәсмә юлдарҙың аралашып килеүе – архаик һыҙат»[6]. Академик Ф.Е. Корш төрки халыҡтарының ауыҙ-тел поэзияһындағы 7-7 ижектән торған үлсәмде бик боронғо мираҫ булып килгән шиғри форма тип билдәләй[7]. Был ғалимдарҙан тыш, В.В. Радлов[8], А.П. Поцелуевский[9], В. Гордлевский[10], Т. Ковальский[11], В.Я. Пропп[12] 7-

---

[2] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 1-се б.

[3] Мокиенко В.М. Образцы русской речи: Историко-этимологические и этнолингвистические очерки фразеологии /В.М. Мокиенко. – Л., 1986. – С. 204.

[4] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 144-се б.

[5] Хөсәйенов Ғ.Б. Башҡорт халҡының рухи донъяһы/Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап, 2003. – 207-се б.

[6] Мелетинский Е.М. «Эдда» и ранние формы эпоса/Е.М. Мелетинский. – М.: Наука, 1968. – С. 18.

[7] Корш Ф.Е. Древнейший народный стих турецких племен/Ф.Е. Корш. – СПб, 1909. – С. 15.

[8] Радлов В. Предисловие к книге «Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири, Джунгарской степи»./В. Радлов. – СПб: Киргизское наречие, 1870. – Ч. 3. – С. 13-26.

[9] Поцелуевский А.П. Метрика произведений Махтум-Кули/А.П. Поцелуевский. – Ашхабад: Совет адабияте, 1943. – № 4-5.

8 ижекле силлабик шиғырҙы төрки халыҡтарҙың боронғо шиғри формаһы, тип иҫбатлай. «Унда бик боронғонан килгән ритмик проза күренештәре лә осрап ҡуя, баштан уҡ әҫәр ритмик проза менән башланып китә һәм ул артабан да күренә тора. Шиғыр юлдары рәүешендә тигеҙ ижеклеккә нигеҙләнгән бик күп өлөштәре рифмаға бөтмәйенсә, бер төрлө грамматик структуралы, теҙемле яңғыраштарға ғына ҡорола»[13]. Ҡобайырҙың төп нигеҙен 7-7, 8-8 ижекле, парлы, теҙмәле, юл аша, тағы бүтән төр рифмалар системаһы, дүрт, алты, ете, һигеҙ юллы строфалар, йәки иркен, күп юллы строфемалар тәшкил итә. Бындай иркен теҙемдәрҙе **поэтик теҙем** йәки **тирада** тип тә атайҙар.

Йөкмәткене үҙенсәлекле байытып, әҫәрҙә ***диалог, монологтар*** (Урал батырҙың, улдары Иҙелдең, Яйыҡтың, Һаҡмарҙың, Нөгөштөң, мең йәшәр ҡарттың монологтары) менән бер рәттән автор телмәренең аралашып килеүе, уға реаллек һыҙаттары өҫтәй.

Эпос стиленә системалашҡан поэтик ҡабатлауҙар, ҡалыплашҡан клишелэр, ассоциатив троптар айырыуса характерлы. Ассоциатив троптарҙан - киңәйтелгән тасуири сараларҙан - «Урал батыр» поэтикаһында **сағыштырыуҙар** айырыуса киң ҡулланыла. «Сағыштырыуҙар ярҙамында әйтергә теләгән уй-фекерҙәр, һүрәтләнгән хәл-ваҡиғалар йыйнаҡ, үтемле, образлы итеп күҙ алдына килтереү мөмкинлеге тыуа»[14]. Улар ыңғай геройҙарҙың тышҡы ҡиәфәттәрен һүрәтләү менән бер рәттән, эске рухи донъяларын, тоғролоҡ, алсаҡлыҡ, ярҙамсыллыҡ кеүек, кире геройҙарҙың алдаҡсылыҡ, аҫтыртынлыҡ, кешелекһеҙлек кеүек сифаттарын да асып бирергә ярҙам итә. Сағыштырыу – әйберҙе, кешене йәки күренеште икенсе бер әйберҙең сифаты һәм үҙенсәлеге менән һынландырыу ул[15]. Ғилми әҙәбиәттә яһалыу формалары һәм мәғәнәләре яғынан сағыштырыуҙарҙың бер нисә төрө билдәле.(Ҡара: Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы / К.Ә. Әхмәтйәнов. – Өфө: Китап, 2003. – 3-сө баҫма. – 133-сө б.)

«Урал батыр» эпосында бигерәк тә ҡушарлы сағыштырыуҙар (күренештең бер ыңғайҙан бер нисә нәмәгә сағыштырылыуы) күп ҡулланыла. Эпоста бындай теҙеп тасуирлау ысулы менән Һомай, Айһылыу, Аҡбуҙат, Ҡатил образдары һүрәтләнә.

Мәҫәлән, эпостағы ҡоштар батшаһы Самрау менән Айҙың ҡыҙы Айһылыуҙың матурлығына һоҡланып халыҡ уны:

«Күмәк ҡыҙҙың эсендә:

Буҙ таштарҙың янында

Бөртөк ятҡан ынйылай,

Күктә балҡып йәмләнгән

Йондоҙҙарҙың айындай;

Һылыуҙарҙың битендә

Айырым торған миңендәй,

[10] Гордлевский В. Из наблюдений над турецкой песнью. Оттиск из этнографического обозрения. – 1909. – Кн. 79.
[11] Ковальский Т. Исследование о форме поэзии тюркских народов. Фонды Отделения общественных наук при АН Киргизской ССР, инв. № 171.
[12] Пропп В.Я. Русский героический эпос/В.Я. Пропп. – М., 1958. – 2-ое изд.
[13] Хөсәйенов Ғ.Б. «Урал батыр» эпосының поэтикаһы /Ғ.Б. Хөсәйенов//Ватандаш. – 2003. – □ 9. – 129-150-се б.
[14] Хәкимова В.Ш. Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә сағыштырыуҙар / В.Ш. Хәкимова // Туған тел һәм әҙәбиәт: конф. тезис. – Өфө, 1994. – 76-сы б.
[15] Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы/К.Ә. Әхмәтйәнов. – Өфө: Китап, 2003. – 3 баҫма. – 133-сө б.

Типһән, туғай үләнен

Йәмләп торған гөлөндәй –

Һылыуҙарҙың һылыуы»[16] –

тип һүрәтләйҙәр. Иң тәүҙә шул аңлашыла: ҡыҙ шул тиклем сибәр, уға тиң юҡ, тышҡы ҡиәфәте менән уның күмәк ҡыҙҙар араһынан айырылып тороуын, халыҡ әле теҙеп үтелгән сағыштырыуҙар ярҙамында һыҙыҡ өҫтөнә ала. Беренсенән, ҡыҙ, матур булараҡ, донъяла гүзәллекте һынландырған ынйыға, айға, гөлгә тиңләнә, икенсенән, күмәк ҡыҙ араһында балҡып тороуы параллелизм алымы менән юғарылағыса һүрәтләнә. Гүзәллекте һүрәтләү, башҡа халыҡтарҙағы кеүек үк, башҡорт фольклорында ла йыш осрай. Былдай «ҡушарлы сағыштырыуҙар» ҡайһы берҙә, текстан тексҡа күсеп, хатта жанрҙан жанрға күсеп, ҡалыплашҡан формулаларға әйләнеп китә. Борон-борондан «ҡатын-ҡыҙ» һәм «матурлыҡ» төшөнсәләре бер-береһенән айырылмаған, бер-береһен тулыландырып торған. Башҡорт фольклорында ғына түгел, башҡа халыҡтар ижадында ла, башҡа төр жанрҙарҙа, мәҫәлән, эпостарҙа, экиәттәрҙә, йырҙарҙа, шиғырҙарҙа, хатта мәҡәлдәрҙә лә ҡатын-ҡыҙ һылыулығын һүрәтләүсе бик күп миҫалдар табырға була. Былдай һүрәтләүҙәр фольклористика ғилемендә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, һәм, Г.Р. Хөсәйенова билдәләүенсә, А.И. Алиева, М.А. Сакали, Ю.Н. Дьяконова кеүек ғалимдарҙың ентекле тикшеренеүҙәрендә айырым урын алып тора. [17]

Башҡорт фольклорында тышҡы матурлыҡҡа эйә булған ҡатын-ҡыҙҙың эске сафлығы ла һоҡландыра һәм, әлбиттә, халыҡ тарафынан тыуҙырылған ыңғай образдар ғына шул һыҙаттарға эйә. Бына, мәҫәлән, Һомайҙың матурлығын һүрәтләгән юлдарға иғтибар итәйек:

«Аның усма шәлкемдәй,

Енсегене ҡапларҙай,

Кәйтән менән биҙәлгән

Сәс толомо һалынған;

Оҙон керпеге үтә

Ҡара күҙе текәлгән;

Уйнап торған ҡыйғас ҡаш

Күҙ өҫтөндә йылмайған;

Тәртәйешкән ҡалҡыу түш

Күҙ алдында тулҡынған;

Бал ҡортондай нәҙек бил

Борғоланып уйнаған;

Гүйә, таныш ҡыҙ төҫлө,

Көмөштәй саф тауышлы»[18].

Халыҡ ҡыҙҙарҙы бал ҡортондай нәҙек билле итеп күрә һәм кәүҙәһенән бигерәк, уның йөҙ һыҙаттарына иғтибар итә: ҡара күҙле, оҙон ҡара керпекле, уйнап торған ҡыйғас ҡашлы, ҡайһы берҙәренең миңдәрен, тештәрен, яғымлы

[16] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 63-сө б.
[17] Хусаинова Г.Р. Поэтика башкирских сказок/Г.Р. Хусаинова. – М., 2000. – С. 24.
[18] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 72-се б.

йылмайыуҙарын, унан ҡала сәстәрен, ҡалҡыу түштәрен, көмөштәй тауышын тасуирлай. Эпоста шундай уҡ юғары художестволы кимәлдә матурлыҡ ҡына түгел, кешенең башҡа төрлө торошо ла ҙур поэтик оҫталыҡ менән һүрәтләнә. Мәҫәлән, Ҡатил батшалығындағы үлемдән ҡасып йөрөүсе ҡарсыҡ түбәндәгесә һынландырыла:

«Бүре талап, өҙгөләп,

Һырҙай ҡанға туҙғандай –

Телгеләнгән арҡаһы,

Айырылған елкәһе,

Сүплек типкән тауыҡтай,

Ҡул-аяғы ярылған,

Тамыр ашап, ер ҡаҙып,

Ауыҙ-бите ҡарайған,

Ҡырау һуҡҡан үләндәй,

Йөҙө-төҫө һарғайған;

Сутлап юнған ағастай

Балтыр ите һулыған.

Бир уңалған ағастай

Елек башы сурайған».

Әбейҙең ауыр тормоштан, өҙлөкһөҙ туҡмалыуҙарҙан телгеләнгән арҡаһы бүре талап өҙгөләүү менән сағыштырылһа, һарғайыуы ҡырау һуҡҡан үләнгә, балтыр ите һулыуы инде уның оло йәштә булыуына ишаралай.

Ҡыҙға ҡарата:

«Көнгә янған тәндәрен,

Һырт ҡаплаған сәстәрен,

Һуплап юнған ағастай

Балтыр ите, беләген,

Ауҙа туйған ҡыйғырҙай,

Кәпәйеп торған күкрәген,

Ҡуға аша йылмылдап

Торған күлдәй күҙҙәрен,

Бал ҡортондай ыҡтымат

Нескә, һылыу билдәрен, –

Оялыпмы, ҡурҡыпмы, –

Бер һылыуҙың ҡарсыҡҡа

Ышыҡланып маташҡан

Бер ҡыҙ мән ҡарсыҡҡа

Урал барып тап булған»[19].

Йәшәйешенең ни тиклем ауыр булыуына ҡарамаҫтан (көнгә янған тән, шырт ҡаплаған сәс), «һуплап юнған ағастай балтыр ите», «ауҙа туйған ҡыйғырҙай, кәпәйеп торған күкрәге», «күлдәй күҙҙәре», «бал ҡортондай нескә билдәре» ише сағыштырыуҙар аша ҡыҙҙың матурлығына, йәшлегенә ишаралана. Йылмылдап торған күлдәй күҙҙәренең ихласлығын күрһәтеп, сәсәндәр уның һылыуҙарҙан-һылыу ғына түгел, ә рухи донъяһының да нәфис, саф булыуына баҫым яһайҙар. Бында ҡарсыҡ менән ҡыҙ – ҡартлыҡ менән йәшлек бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйып сағыштырыла йәғни **антитеза** (грек һүҙе antithesis – ҡапма-ҡаршы ҡуйыу) рәүешендәге контраст поэтик фигура ярҙамында тасуирланып, әҫәргә образлылыҡ өҫтәй.

Ғәҙәттә, башҡа халыҡтарҙың әҫәрҙәрендә лә ҡыҙҙарҙың тышҡы ҡиәфәте бик ентекле һүрәтләнә. А. Кинйәбузова, В. Хазиев билдәләүенсә, «люди, умеющие так тонко ценить женскую красоту, независимо от их материального уровня, должны быть отнесены к народам, достигшим самых высоких вершин духовной культуры»[20]. Сәсәндәр үҙҙәренең әҫәрҙәрендә ҡатын-ҡыҙҙы нисек күргеләре килһә, шундай итеп һүрәтләргә тырышҡан. Фольклорҙа ҡатын-ҡыҙ матурлығы ғына түгел, егет, ат, йорт, ил һ.б. матурлығы ла урын ала һәм был осраҡта ла сағыштырыуҙар бик уңышлы ҡулланыла. Ҡайһы саҡта ҡушарлы сағыштырыуҙар хатта теҙмә киңәйтелгән һүрәтләүгә әйләнеп китә.

Ҡушарлы сағыштырыуҙар эпоста Урал барып тап булған ҡыҙ менән уның әсәһен, барса халыҡты ҡан-йәш илатҡан Ҡатил батшаны, Самрау менән Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы, Ай ҡыҙы Айһылыуҙы һүрәтләгәндә ҡулланылған. Быңдай ҡушарлы сағыштырыуҙар һүрәтләнгән күренештең күп ҡырлы һәм ҡатмарлы булыуын һынландырыу өсөн бик ҡулай сара һанала.

***Эпоста сағыштырыуҙарҙың тағы бер үҙенсәлекле төрө –дай, –дәй, –ҙай, –ҙәй, –лай, –ләй, –тай, –тәй ялғауҙары менән белдерелегәндәре күп осрай. Сағыштырыуҙарҙың быңдай төрө һүҙ барған эпоста ҡыҙҙарҙың матурлығын (Һомай, Айһылыу, әбей, ҡыҙ), батырҙарҙың көсөн, маһирлығын йәиһә мифик персонаждарҙың (Ҡәһҡәһә, Зәрҡум) кире сифаттарын, Самрау, Ҡәһҡәһә илен һүрәтләгәндә ҡулланыла. Мәҫәлән:***

***1. «Йөҙө айҙай балҡыған,***

***Күкрәктәре ҡабарып,***

***Һылыу булып ҡалҡыған».***

***2. «Күс башлығы инәләй,***

***Ҡунаҡ көткән эйәләй».***

***3. «Бал ҡортондай нәҙек бил,***

***Борғаланып уйнаған».***

***4. «Көмөштәй саф тауышлы,***

***Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан».***

***Ҡыҙҙарҙың йөҙөн халыҡ ай кеүек балҡып торғанға – айға, нәҙек билдәренең уйнап торғанлығын – бал ҡорттарына, тауыштарын – көмөштәй***

[19] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 21-се б.

[20] Киньябузова А., Хазиев В. Космос и хаос в башкирской мифологии/ А. Киньябузова, В. Хазиев//Ватандаш. – □ 9. – 2003. – С.182.

***сыңлап торған саф шишмәгә тиңләй, уларҙың алсаҡлығын күс башлығы инәгә сағыштыра. Урал батыр Айһылыуҙы «ем-ем иткән ынйылай бер һылыу ҡул» буйынан табып алғас, ҡыҙ уға:***

«Һине күргәс, бар уйым, –

Ел тараткан *болоттай,*

Ҡаса торған бар юлым, –

Йүгереп бөткән *һукмактай,*

Күҙ алдымдан киттеләр»[21], –

***ти. Был юлдарҙа Айһылыуҙың уйҙары ел тараткан болот, йүгереп бөткән һуҡмаҡ менән сағыштырыла. Ҡулланылған ялғауҙарҙы эпостағы «кеүек» һүҙе менән алмаштырып булыр ине, йәғни «күс башлығы инә кеүек», «ҡунаҡ көткән эйә кеүек» һ.б.***

Шулай итеп, «Урал батыр» эпосында сағыштырыуҙар ҙур ғына урын ала һәм актив ҡулланыла. Бигерәк тә ҡушма сағыштырыуҙар, -дай, –дәй, –тай, –тәй, –ҙай, –ҙәй ялғауҙары менән белдерелгәндәре беҙ өйрәнгән эпос тексында ныҡлы урын алған.

Сағыштырыуҙарҙан ҡала эпоста һүрәтләү сараларынан **эпитеттар** уңышлы ҡулланыла.

Эпитет (грек һүҙе – epitheton – ҡушымта) – художестволы аныҡлаусыларҙың күсерелгән мәғәнәле төрө[22]. Эпитеттар, башҡа һүрәтләү саралары кеүек үк, реаль тормоштоң үҙенән алына. Улар кешенең тирә-яҡ нәмәләрҙе һәм тәбиғәтте, уға ҡағылышлы бар сифаттарҙы яҡшы белеү, күҙәтеү нигеҙендә тыуып, телде матурлау, биҙәкләү һәм көсәйтеү сараһы булып тора. Эпитеттарҙы өйрәнгәндә П.Д. Первов: «Область эпитетов довольно строго ограничена: они сопровождают почти исключительно предметные названия, особенно названия предметов осязаемых», – тип яҙа һәм, уларҙы классификациялап, алты төркөмгә: органик-боронғо, төҫтө белдереүсе, материалды, предметҡа кешенең хисен, мөнәсәбәтен, предметтың үлсәмен белдереүсе, ғәҙәти эпитеттарға бүлеп ҡарай. «Эпитеты в русских былинах»[23] тигән мәҡәләһендә иһә ғалим уларҙың өс категорияһын күрһәтә: беренсе, бик боронғо эпитеттар, бирелгән атаманың төп, тамыр мәғәнәһен яңырталар, икенсе төркөмдө атаманың яңы, күҙ алдында тотолған, ләкин шул уҡ ваҡытта уға ғына хас билдәһен күрһәтеүсе эпитеттар тәшкил итә, өсөнсө категория эпитеттар һүҙҙең тамыр мәғәнәһе менән бәйләнгән билдәне белдерә. А.И. Веселовский үҙенең «Тарихи поэтика» тип исемләнгән хеҙмәтендә эпитеттың түбәндәге төрҙәрен билдәләй: тавтологик эпитет (зәңгәр күл), аныҡлаусы эпитет (аҡбуҙ ат), метафорик эпитет (ике троптың бергә ҡушылыуы нигеҙендә яһала: ҡара ҡайғы), синкретик эпитет (йәшел тауыш)[24]. Йәйә эсендә күрһәтелгән миҫалдар А.И. Веселовскийҙың классификацияһының башҡорт материалында раҫланыуын күрһәтә.

«Урал батыр» эпосында эпитеттар тасуирлана торған эпик геройҙарҙың, образдарҙың төҫ-ҡиәфәтен, буй-һынын, характерын асыуҙа, хәл-ваҡиғаларҙың образлылығын көсәйтеүҙә мөһим роль уйнай. Әҫәрҙә тәү сиратта, халыҡ ижадында йыш осрай торған «даими эпитеттар» күҙгә салына: *һылыу ҡыҙ, ҡанлы йәш, уҫал йөрәк, бәғерле йөрәк, уҫал да менән аҡ ҡыҙ, яуыз ил, ҡаты фарман, яуыз Үлем, ҡаты*

[21] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 80-се б.
[22] Әхмәтйәнов К.Ә. Күрһәтелгән хеҙмәт. – 157-се б.
[23] Первов П.Д. Эпитеты в русских былинах. Оттиски из «Филологических записок» за 1901 и 1902 г/П.Д. Первов. – Воронеж. – 44 с.
[24] Веселовский А.Н. Историческая поэтика/А.Н. Веселовский. – Москва,1989. – С. 59-36.

*ел.* Бындай эпитеттар предметтың бары тик характер һыҙаттарын күрһәтә, художестволы һүрәтләү аша персонаждың кире һәм ыңғай сифаттарына баҫым яһай. Даими эпитеттар бер, ике йәки бер нисә элементтан торорға мөмкин, мәҫәлән, *бал ҡортондай нескә билле, нескә һылыу билдәрен, көмөштәй саф тауышлы, күккә олғашҡан ҙур тауҙай, ҡыҙғаныусан йәш йөрәк, еңел текә тояҡлы, ҡабан суҫҡа елкәле, уйнап торған ҡыйғас ҡаш* һ.б. Бер һүҙҙе ике тапҡыр ҡабатлау юлы менән яһалған парлы һүҙҙәрҙән торған даими эпитеттар эпик телде тағы ла байытып ебәрә: *ваҡ-ваҡ күллек һаҙ ине, өйөр-өйөр туп булып, үркәс-үркәс ҡаяһы, уйым-уйым күлдәр* һ.б.

«Урал батыр» эпосында төҫтәр символикаһы айырым урын алып тора. Аҡ, ҡара эпитеттары бик йыш телгә алына, мәҫәлән, *ап-аҡ һаҡал, ап-аҡ коштар, аҡ таш, аҡ йөрәк, аҡ һүҙ, аҡ йөҙ, аҡ ҡыҙ, ҡап-ҡара ҡан, ҡара ҡая, ҡара йөҙ, ҡара төн.* Аҡ һаҡал, аҡҡош, аҡ таш ише һүҙбәйләнештәрҙә «аҡ» һүҙе предметтың тышҡы сифатын, йәғни төҫөн генә билдерһә, башҡа осраҡта эпитеттар төҫ символикаһына барып тоташа. Мәҫәлән, *ҡара йөрәк, ҡара йөҙ.* Бында төҫ түгел, ә кире персонаж йәки уҫал кеше күҙ уңында тотола. Аҡ ҡыҙ, аҡ йөрәк шулай уҡ киңерәк, тәрәнерәк мәғәнәгә эйә: ыңғай персонаж, изге кеше.

Аҡ эпитетына килгәндә, эпоста ғына түгел, ғөмүмән, башҡорт мифологияһында аҡ һүҙе изгелек, сафлыҡ, яҡтылыҡ, мәрхәмәтлелек символы ул. Аҡ һүҙенә ҡушылып яһалған һүҙҙәр, мәҫәлән, аҡһаҡал, аҡ уй, Аҡбуҙат һ.б. барыһы ла бары тик яҡшы тойғолар менән бәйле. Аҡһаҡал төрки телле халыҡтар телендә традицион образ. Аҡ һаҡаллы кәңәшсе, ярҙамсыл, тылсым көсөнә эйә булған ҡарт образы «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Алдар менән Зөһрә» эпостарында осраһа, «Китабе Деде Коркут» оғуз героик эпосында, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, әзербайжан эпик әҫәрҙәрендә, ап-аҡҡа төрөнгән ҡарт – Хызыр образында йөрөй. Юлда аҙашып ҡалған юлсыға, яуызлыҡтан интеккән халыҡҡа үҙенең кәңәштәре, изге теләктәре менән ярҙам итә ул. Мифологияла, аҡ һүҙе булған заттар изге, кешегә бәхет килтереүсе итеп һүрәтләнә.

Һомай Уралдың кәүҙәһе янында бына нимә тип һыҡтай:

«Ҡош көйөмә ҡалырмын,

Тыу йоморҡа һалырмын;

Балам буһа, ҡош булыр,

Һинең керһеҙ уйыңдай

Төҫө буһа, аҡ булыр»[25].

«Һинең керһеҙ уйыңдай», ти ул. Борондан кеше аңына аҡ төҫ саф, изге төҫ булып һеңгән һәм эпоста ла шундай сағылыш тапҡан.

Аҡ төҫтәге малдан ҡорбан салыу йолаһы ла йәшәп килә башҡорт халҡында. Ниндәйҙер алға ҡуйылған маҡсаттың (эштең) уңышлы килеп сығыуын теләп, халыҡ борон-борондан аҡ төҫтәге малды нәҙер итеп әйткән.

Икенсе яҡтан, аҡ һүҙе бөйөклөккә, йәғни батша булыуға ла ишаралай. Мәҫәлән, эпостағы аҡ йылан образы. Ул Ҡәһҡәһә батшалығында «утҡа инһәң, яналмаҫ, һыуға төшһәң, баталмаҫ, күренмәҫкә теләһәң, һис бер йән күрәлмәҫ» көскә эйә булған ынйы башлы таяҡты һаҡлап ятыусы аҡ йылан. Аҡ йыланға бәйле фольклорҙа бик күп ышаныуҙар ҙа йәшәп килә. Аҡ йылан – йыландар батшаһы итеп ҡабул ителә, йәнәһе лә, аҡ йылан осраған кешегә бәхет, ырыҫ килә. Ул осрағанда алдына аҡ сепрәк йәйһәң, мөгөҙөн һалып китә, шуны һаҡларға кәрәк тигән ышаныу

[25] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233. – 137-се б.

ҙа бар. Йылан йәшәгән өй, кәртә-ҡура имен тора, тип тә әйтәләр. Өҫтә әйтелгәндәр аҡ төҫтөң ҡатмарлы семантикаға эйә булыуына, уның яҡшылыҡ, изгелек символы ғына түгел, ә социаль статусты билдәләүсе категория булыуына ла ишара яһай. Әммә «Йыландың ағы ла – йылан, ҡараһы ла – йылан» тигән әйтем дә бар. Тимәк, йыландың яҡшылығы, изге булыуы тураһында күп ышаныуҙарға ҡарамаҫтан, кеше тормошонда кире сифаттағы, кешеләрҙе ҡурҡыта, зыян килтерә торған йән эйәһе булараҡ та урын алған.

«Манас» героик эпосының телен өйрәнеүсе Р.З.Кыдырбаева, аҡ төҫ хаҡында «когда-то белый цвет почитался наряду с огнем как священный, но позднее сформировался в чисто художественный прием»[26] тип яҙа. Төрөкмәндәрҙә, А.Кекилов ҡарашы буйынса[27], тәүҙә «аҡ» һүҙе көндәлек тормошта конкрет бер төҫтө белдерһә, һуңғараҡ ыңғай күренештәрҙең дөйөм мәғәнәһенә ишаралай.

Ә ҡара эпитетына килгәндә инде, был һүҙ элек-электән насарлыҡ, бәлә, ҡайғы мәғәнәһен белдергән. Кеше ниндәйҙер хилафлыҡ, насарлыҡ ҡылһа, уға ҡара йөҙлө, ҡара уйлы, ҡара йөрәкле икән тиҙәр, йыландарҙың да иң ағыулыһы ҡара йылан тиҙәр, эпоста ла ҡара һүҙе менән бар насар нәмәне атайҙар. Ер/һыу аҫты донъяһын һүрәтләгәндә күберәк ҡара төҫ ҡулланыла. Унда һәр ваҡыт шомло, ай, ҡояш нуры ла үтә алмаҫлыҡ ҡараңғылыҡ. Ҡара төҫ әҫәрҙә дошмандар яғын һүрәтләгәндә айырыуса уңышлы ҡулланыла. Ҡараңғы һыу аҫтын биләүсе Шүлгәндә лә бит бына нисек һүрәтләнә:

«Ҡарайып бөткән ҡаныңды,

Үткәнеңде уйлатып,

Йөрәгеңде һыҙлатып,

Тәнең һыҙлап ҡағайһын,

Йәнең һыҡтап ағарһын;

Йөрәгеңдәге ҡара ҡан

Кибеп ҡабат ҡыҙарһын»[28].

Шүлгәндең үткәнендә ҡылған ҡылыҡтарын, яуызлыҡтарын Урал бер генә һүҙ – ҡара һүҙе менән әйтеп бирә. Ҡара ҡан тигәндән, Шүлгәндең ҡаны ҡара төҫтә булғандан түгел, уның ҡылған ҡылыҡтары, үҙе насар кеше икәненә баҫым яһар өсөн ҡара ҡанлы, тип әйтелә. Ҡара эштәр эшләгәнгә уны ҡаны ҡара тип атағандар, һыҙлау, һыҡтауҙар, йәғни ҡылған эштәргә тәүбә ҡылыу ғына ҡара ҡанды киптереп, ҡыҙыл ҡанға әйләндерә ала, йәғни кешеләр уны ғәфү итеп, араларына алырҙар ине, тигән мәғәнә ята ул юлдарҙа.

Шулай итеп, төҫтәр ҙә эпос йөкмәткеһенә өҫтәлмә мәғәнә биреп, уны тағы ла камиллаштырып ебәрә, ҙур контрастлыҡ поэтикаһында мөһим роль уйнай.

Эпитеттар образдарҙы тулыраҡ асып бирергә һәм әҫәрҙең идея йөкмәткеһен, мәғәнәһен асыҡларға ярҙам итә, уларҙың ҡайһы берҙәре, сағыштырыу алымы менән ҡатлауландырылып, һүрәтләүҙе тағы ла сағыуыраҡ итеп бирә. Мәҫәлән, Ҡатилды һүрәтләгәндә ҡан көҫәүсе, яуыз, имәнес, йыуан эпитеттары ҡулланыу, был кире образды бөтә шөҡәтһеҙлегендә күҙ алдына баҫтырырға ярҙам итә. Был батшаның иле лә шундай уҡ эпитеттар менән һүрәтләнә:

«Уңға китһәң, юл буйы –

[26] Кыдырбаева Р.З. Генезис эпоса «Манас»/Р.З. Кыдырбаева. – Фрунзе: Илим, 1980. – С. 113.
[27] Кекилов А. Сөз сырлары/А. Кекилов. – Ашгабат: Ылым, 1975. – С.129.
[28] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233. – 122-се б.

Илау-һыҡтау төн буйы:

Яуызлыҡта дан алған,

Аҡ һаҡалдан, батшанан

Ҡайғы, этлек күреүсе,

Ҡанлы йәшен түгеүсе

Ҡатил батша иле бар;

Тау-тау кеше һөйәге,

Ҡанға батҡан ере бар...»[29]

Эпоста, башҡа геройҙарҙан айырмалы рәүештә, Урал батырҙың тулы портреты бирелмәй. Уның образы батырҙың ҡылған эштәре, һөйләгән һүҙҙәре аша, башҡа персонаждарҙың уның хаҡында әйткән һүҙҙәренә ҡарап кҙаллана. Мәҫәлән, уның донъяға килгән мәле тураһында эпоста Ҡәһҡәһә менән Әзрәҡәнең һөйләшеүендә былай тип әйтелә:

«– Анау саҡта, ай, батшам,

Бер йәш бала тыуғанда,

Аның тауышы килгәндә,

Күктә осҡан дейеүҙәр

Бары ҡолап төшкәйне»[30].

Был юлдар донъяға ябай булмаған батыр тыуыуына ишаралай һәм ҡара көстәрҙә уны шунда уҡ юҡ итеү теләге тыуыуын һүрәтләй:

«Аны урлап алырға,

Үлтереп юҡ ҡылырға»[31], –

әммә донъяға тыуған батыр алдында улар көсһөҙ һәм:

«Барған дейеү, ендәрҙең

Бала теклэп ҡарағас,

Тоторға тип уҡталғас,

Барған бере ҡурҡыуҙан

Йөрәге ҡубып үлгәйне»[32] –

тигән юлдар ысын мәғәнәһендә батыр тыуыуына ышандыра.

Был өҙөктән күренеүенсә, Урал батыр хатта бишектә ятҡан мәлдә үк, бар яуыз йәндәрҙе ҡурҡыуға ғына һалмаған, ә "үлтерә" алған. Был өҙөк гректарҙың Гераклдың тыуыуы һәм тәрбиәһе тураһындағы мифты хәтерләтә. Унда Зевстың ҡатыны Гера Алклина менән Зевстың игеҙәк улдары тыуғас, көнләшеп, яңы тыуған балаларҙы үлтермәксе була һәм уларҙың сәңгелдәгенә ике йылан ебәрә. Әммә, Геракл үҙенең бәләкәй генә ҡулдары менән йыландарҙы һығып үлтерә[33].

[29] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 20-се б.
[30] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 60-сы б.
[31] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 60-сы б.
[32] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 60-сы б.
[33] Кун Н.А. Легенды и мифы древний Греции/Н.А. Кун. – СПб.: Кристалл, 2000. – С. 115.

«Баһадир образы, беренсе ҡарашҡа, ҡаршылыҡлы, – тип яҙа Е.М.Мелетинский. – Уның көсө, ҡыйыулығы һәм көс-ҡеүәте ғәҙәттән тыш итеп күрһәтелә, батырҙа шәхси инициатива ғына түгел, үҙ-үҙенә артыҡ ышаныусанлыҡ, кирелек, ғорурлыҡ һәм хатта үҙһүҙлелек сифаттары ла асыла»[34]. Һанап үтелгән сифаттарҙың барыһын да тип әйтерлек Урал образында табырға була. Ул – бар яуызлыҡҡа ҡаршы торорлоҡ көскә эйә, ҡыйыу, әммә шул уҡ ваҡытта ҡыҙыу, ғәрсел, алдына ҡуйған маҡсаттарына өлгәшә торған батыр. Мәҫәлән, эпос Урал батырҙы, үҙенең ҡаһарманлығына ярашлы рәүештә, ғәҙәттән тыш бәһлеүән-великан итеп һынландырған: Һомай һүҙҙәре буйынса, Урал – ҙур кәүҙәле батыр, йәғни алып («Һай, егетем, егетем, батыр-алып* икәнһең»).

Артабан Уралдың ғәләмәт көслө булыуы текста даими күҙәтелә: ул Ҡатил батшалығындағы тауҙай үгеҙҙе, батшаның ҙур дейеүҙәй дүрт батырын еңә, йыландар батшаһы Ҡәһҡәһәнең, Әҙрәҡәнең аждаһа-йыландарын, дейеүҙәрен ҡыйрата. Ә инде ғәҙеллек юллауы, бар кешелеккә, тәбиғәткә мәңгелек бүләк итеүе уны Алла дәрәжәһенә күтәрә. Хатта ҡайһы берҙәре уға «ай, Аллам икәнһең» тип, икенселәре «Алла бирмәҫ ярҙамды беҙгә егет башҡарҙың, ил ҡаплаған яуыздың утлы яуын аҡтарҙың» тип, ололап өндәшә. Һуңғы һулышынаса яуыз дейеү-аждаһалар менән көрәшеп үлгәс, халыҡ уны хөрмәтләп ерләгәндән һуң, уның ҡәберенә һәр кем берәр ус тупраҡ һалғандан, «ул ерҙә алтын булып киткән»дән, ҡаһармандың шунса изгеләштерелеүен, Аллаға тиңләштерелеүен дә тойомларға була. Холҡоноң тағы бер яғы: ағаһы Шүлгән етмеш батман ауырлығындағы ташты алып ташлай алмаған саҡта, Урал ғәрләнеп ташты осора һуғып, күккә сөйә, йәғни ағаһының ташҡа көсө етмәүен түҙеп ҡарап тора алмай – ярҙамға килә.

Үҙенә артыҡ ышаныуын ул үлер алдынан улдарына, бар халыҡҡа үкенгән, үҙен битәрләгән һымағыраҡ әйтә:

«Яу тупларлыҡ еремдә
Талай илем бар ине;
Ҡулдаш булыр илемдә
Батыр ирҙәр бар ине.
Шулар ҡәҙерен белмәнем,
Батырлыҡҡа маһайып,
Кәңәш ҡороп торманым,
Яңғыҙ башым уйланым,
Уңмаҫ юлды һайланым»[35].

Был юлдарҙың фәлсәфәһе нисек кенә батыр, көслө булма, ил эштәрен халыҡ менән кәңәшләшеп эшлә, тигәнгә ҡайтып ҡалған һымаҡ.

Әҫәрҙә батыр образы ана шундай күп төрлө ыңғай һыҙаттар менән һүрәтләнгән. В.Г. Белинский батыр геройҙар хаҡында: «Халыҡ фантазияһы риүәйәт менән берлектә ҡеүәтле баһадир тыуҙыра, ул баһадирҙың мифик образында халыҡтың үҙ образы һәм уның яҙмышы, символы күренә», – тип тә яҙған[36]. Урал исеме һәр ваҡыт батыр эпитеты менән бирелә, ошо бер һүҙ уның бар асылын

[34] Мелетинский Е.М. Происхождение героического эпоса. Ранние формы и архаические памятники/Е.М. Мелетинский. – М.: Изд-во вост. лит., 1963. – С. 423.
* Алып – төрөк һүҙе, батыр. «Алып һүҙе» – эпик батырҙарҙың көрәш алдынан бер-береһенә әйтә торған һүҙе.
[35] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 135-се б.
[36] Белинский В.Г. Полное собрание сочинений в 13 томах/В.Г. Беленский. – М., 1953. – Т.3. – С. 345.

күрһәтеп тора. «Борон башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарында ла батыр ил-ырыуҙың данлыҡлы ҡаһарманын, яу батырын аңлатҡан шанлы исем. Улар ил, халыҡ азаматтары булараҡ, дан-шөһрәт алған. Батыр исеме үҙе менән дәрәжәһен, аҫыл заттар иерархияһында үҙ урынын да билдәләшкән. Борон яуҙарҙа еңеп сығыусы батыр икән, уға ниндәйҙер хәрби башлыҡ исемен дә алып килгән, үҙе аҫыл заттар араһына ингән. Яуҙа еңеп ҙур ульялар(трофейҙар) алып ҡайтһа, байып та киткән. Шулай исеме, дәрәжәһе, вазифаһы, байлығы артҡан»[37].

Шүлгән образы иһә Уралға ҡаршы ҡуйыла һәм, кире образ булараҡ, бары тик насар эштәр ҡылыусы, тар күңелле, дан-шөһрәт артынан ҡыуыусы итеп тасуирлана. Был һыҙаттар уның бар булмышында, йәшәйешендә, башҡарған эштәрендә һыҙатланыш тапҡан. Ғөмүмән, эпоста яуыз заттарҙың исемдәренән үк уларҙың ниндәй икәнлектәрен аңларға була, мәҫәлән, Ҡәһҡәһә (ғәрәп һүҙе) – шарҡылдап көлөүсе, Зәрҡүм (ғәрәп һүҙе – зәрҡ) – хәйләкәр, ике йөҙлө кеше, Әзрәҡә (ғәрәп һүҙе) – тура мәғәнәһе: күгәреү, зәңгәрләнеү тигәнде аңлата. З.Әминев билдәләүенсә[38], Ҡатил – ул исем түгел, ә батшаның үтәгән функцияһын билдәләүсе атама ғына. Был персонаждарҙың исемен атауға борон башҡорттарҙа, күрәһең, тыйыу(табу) булғандыр. Боронғо ышаныуҙар буйынса, башҡортҡа ҡайһы бер сирҙәрҙең атамаһын әйтеү тыйылған, сөнки исемен әйтһәң, ул сир шундуҡ килеп етә, тип уйлағандар, һунарға барғанда йыртҡыстың исемен атау рөхсәт ителмәгән, һ.б. Ошо ҡағиҙә үлемгә ҡарата ла ҡулланылған, шуға күрә теге донъя йәки икенсе төрлө әйткәндә, үлеләр донъяһы персонажы булараҡ, Ҡатил тип аталған персонаждың исеме эпоста әйтелмәй. Башҡорт теленә Ҡатил һүҙе иран телле халыҡтар теленән «үлтереүсе» мәғәнәһендә килеп ингән, Ҡатил батша һүҙбәйләнеше «үлтереүсе батша» тигәнде аңлата. Күренеүенсә, эпоста батшаның исеме түгел, ә уның башҡарған эштәре күрһәтелә.

Ә ҡоштар батшаһы Самрауҙың изге күңелле, гүзәл булыуын уның илендәге тормошто бәйән иткән өҙөктән күҙалларға була. Самрау, Һомай исеме башҡорт фольклорында ғына түгел, башҡа төрки халыҡтар ижадында ла йыш осрай торған изгелекле мифик ҡош образы ул. Самрау һүҙенең һәм образының килеп сығышын ғалимдар иран телдәре менән бәйләй. Күк батшаһы Самрау – Оло, Баш тәңре тигән мәғәнәне аңлата[39]. Айһылыу, Гөлөстан, Аҡбуҙат, Етегән исемдәре күк-йыһан исемдәренә бәйле космогоник ҡараштарҙан тыуған исемдәр. Айһылыу исеменең килеп сығышына ҡарата эпоста ҡыҙ үҙе үк аңлатма бирә:

«Ҡараңғы төн яҡтыртҡан,

Айҙан тыуған бала инем»[40], –

ти ул. Ысынлап та, башҡорт халҡында, исемдәрҙә «ай» һүҙе күп булыуы баланың ғәҙәттә төндә (айлы төндә) тыуыуына ишаралай. Төрки халыҡтарында матурлыҡты ай менән сағыштырыу киң таралған. Алда әйтелгәнсә, Айһылыу – ай һылыуы, ай матуры. Ҡайһы бер төрки телдәрендә (алтай, уйғыр) «ай» һүҙе күсмә мәғәнәлә «матурҡай» тигәнде белдереү өсөн дә ҡулланыла.

Эпоста Иҙел, Яйыҡ, Һаҡмар исемдәре иһә шул атамалы йылғаларға барып тоташа. Яйыҡ, Урал батыр менән үлеләр донъяһы батшаһы Ҡатилдың исеме әйтелмәгән ҡыҙынан тыуған батыр. З.Г. Әминев, был геройҙы өйрәнеп, уны «донъяның төньяҡ тарафын һаҡлап тороусы, әҙәм балаларына тереһыу биреүсе

[37] Хөсәйенов Ғ.Б. Күрһәтелгән хеҙмәт. – 54-се б.
[38] Аминев З.Г. Космогонические воззрения древних башкир/З.Г. Аминев. – Уфа: Башлингвоцентр, 2005. – С. 54.
[39] Хисамитдинова Ф.Ғ. Башҡорт мифологияһы. Белешмә-һүҙлек/ Ф.Ғ. Хисамитдинова. – Өфө: Ғилем, 2002. – 101-се б.
[40] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 116-сы б.

илаһ» тип атай(һинд-иран мифологияһында төньяҡты һәм көнбайышты ҡара төҫ аша, ә көньяҡты – аҡ төҫ, көнсығышты ҡыҙыл төҫ менән билдәләр булғандар, ә Яйыҡ картатаһы Ҡатил һәм әсәһе аша төньяҡ персонажы, улар иле «теге донъя»– үлеләр донъяһы, ә ҡара төҫ – үлеләр иле төҫө. Көнбайышты – Шүлгәндең улы Һаҡмар, көньяҡты – Нөгөш, көнсығышты – Иҙел батыр һаҡлап торор булғандар). Себер киңлектәрендә йәшәүсе төрки телле халыҡтарҙа Яйыҡ исемле ҡатын-ҡыҙ затлы илаһ образының әлеге көндә лә һаҡланыуын билдәләп үтә»[41].

Эпоста Йәнбирҙе менән Йәнбикә, ғөмүмән, ерҙә кешеләр тоҡомон башлап ебәреүсе булараҡ һүрәтләнә һәм уларҙың исемдәре лә тәү кешеләр икәнлеген белдерә: Йәнбирҙе – йән биреүсе ир, Йәнбикә – йән биреүсе ҡатын. Улар башҡорт ырыуҙарын башлап ебәреүсе тәүкешеләр һәм тәүҡаһарманға йән биреүсе демиургтар рәүешендә күҙаллана. Урал менән Шүлгән исемдәренең килеп сығышын һәм уларҙың мәғәнәһен аңлатыуы ҡыйынлыраҡ. Ғ.Б. Хөсәйенов, Урал исемен, бер-береһенә яҡын теҙелеп, уралып ятҡан тауҙар исеменән алынғандыр, тип фаразлай. Башҡорттар борон дарья уртаһында барлыҡҡа килгән утрауҙы арал тип атар булғандар, арал исеме тора-бара фонетик яҡтан үҙгәреп, урал булып китеүе ихтималлығын да әйтә ул[42]. Һәр хәлдә, Урал батырҙың исеме, уның батырҙарса эшмәкәрлеге ошо тауҙар менән бәйле. Шүлгән исеменең сығышын А.М. Сагалаев Шу (Су, Һыу) төрки һүҙенең Үлгән тигән мифик батырҙың исемендә берләшеүенән тыуған, тип һанай[43]. Ә «Шүлгән» һүҙенең этимологияһын Г.Х. Бохарова шүле – һыу, гән – хан, йәки һыу батшаһы (ханы) тип аңлата, сөнки был персонаж башҡорт мифологияһында һәр ваҡыт һыу аҫты донъяһы батшаһы булып күҙаллана[44].

Шулай итеп, эпоста исемдәр геройҙарҙың характерын асыу, эпостың эске мәғәнәһен һәм образлы тәбиғәтен тәрәнерәк аңлау өсөн ҙур әһәмиәткә эйә.

Ҡулланылышы яғынан йыш булмаһа ла, әҫәрҙә метафорик эпитеттар ҙа (ике троптың бергә ҡушылыуы нигеҙендә яһала) осрай: *һытыҡ йөҙ, аҡ бәхет, ҡара урман, керһеҙ уй, аҡ һүҙ, ҡара ҡайғы, күбәләктәй йән, асыҡ яуап, ялҡынлы уй, яман һыу, баҡыр күҙ* һ.б. Был һүҙҙәр эпос теленә ифрат бай тел материалы бирә.

«Урал батыр» эпосында **метафоралар** (метафора – ике әйберҙең үҙ-ара оҡшашлығына нигеҙләнгән йәшерен сағыштырыу)[45] әллә ни йыш ҡулланылып бармай, әммә осрай. Был хәл, моғайын, эпитет һәм сағыштырыуҙарҙың өҫтөнлөк алыуынан киләлер. Ә.Н.Кирәйев тә үҙенең бер хеҙмәтендә «сағыу метафоралар ҡобайырҙарға хас түгел» тип билдәләп үткәйне[46]. Шулай ҙа әҫәр буйынса бер нисә миҫал табырға була. Мәҫәлән:

1. ..............................

«Ботаҡтарын һайлаған

**Һөйкөмлө ағас** булғандыр»[47].

2. .............................

«Һомай тигән ҡыҙымын,

[41] Әминев З.Г. Башҡорт халыҡ ижадында Яйыҡ образы/З.Г. Әминев//Ағиҙел. – № 3. – 1996. – 167-се б.
[42] Хөсәйенов Ғ.Б. «Урал батыр» эпосының поэтикаһы /Ғ.Б. Хөсәйенов//Ватандаш. – 2003. – □ 9. – 139-сы б.
[43] Сагалаев А.М. Урало-алтайская мифология/А.М. Сагалаев. – 1991. – 68-69-сы б.
[44] Бухарова Г.Х. О происхождении мифотопонима «Шульган»/ Г.Х. Бухарова // Ватандаш. – 2003. – № 11. – С. 139-143.
[45] Әхмәтйәнов К.Ә. Күрһәтелгән хеҙмәт. – 138-се бит.
[46] Киреев А.Н. Некоторые художественные особенности кубаирского стиха/ А.Н. Киреев// Фольклор народов СССР. – Уфа, 1976. – С. 10.
[47] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 11-се б.

**Алтын сәсем** тараһам

Нурға илде күмәмен»[48].

3. .............................

Ҡан эсергә уҡталған

**Уҫал йөрәген** бөтһөн»[49].

Миҫалдарҙан күренеүенсә, тик фольклор әҫәрҙәрендә генә таралған *һөйкөмлө ағас, ынйыы таяҡ, алтын сәс, уҫал йөрәк, һытыҡ йөҙ, яҡшы уй, ҡуш йөрәк, һылыу ҡош, яуыз ил* һ.б. кеүек метафоралар әҫәрҙең телен байыта, уны халыҡ ижадына ғына хас традицион образдар менән биҙәй.

«Урал батыр» эпосында геройҙы, уның таянысы булған толпарҙы, шулай уҡ геройҙың дошмандарын һүрәтләгәндә, улар менән көрәш майҙандарын сағылдырған мәлдәрҙә, мифологик ваҡытты күрһәткәндә һүрәтләү сараларының тағы бер үҙенсәлекле төрө **гипербола** айырыуса күп ҡулланыла. Гипербола (грек һүҙе – huperbole – аштырып һөйләү) хәл-ваҡиғаны йәиһә ҡаһарманды саманан тыш күпертеп, аштырып һүрәтләү сараһы. Гипербола ысынбарлыҡты эпик сағылдырыусы төп принцип булараҡ, эпостың йөкмәткеһенә үтеп инеп башҡа һүрәтләү сараларының функцияларына ныҡлы тәьҫир итә. Был алымды халыҡ ижады әҫәрҙәрендә, бигерәк тә эпос, әкиәт, легендаларҙа күп табырға була. Ерҙә ғәҙеллек һәм яҡшылыҡ яуларҙай батырҙарын халыҡ үҙенең әҫәрҙәрендә идеаллаштырып, шаштырып һүрәтләй. Тылсым ярҙамында улар әҫәрҙә «Һыуға төшһә, батмаҫ, утҡа инһә, янмаҫ, күренмәҫкә теләһә, һис бер йән дә күрәлмәҫ, дошман эҙләһә, бер ҡасан да табалмаҫ» батыр булып күҙ алдына баҫа.

Героик эпос – боронғо замандың халыҡ аңындағы поэтик сағылышы, художестволы фантазияла йәнләндерелгән тарих ул[50]. Һәм, ниһайәт, фантастика гиперболаһыҙ булмай. Гипербола ярҙамында батырҙың «иңдәрҙән-иң» сифаттарын, йәғни көсөн, ҡеүәтен, батырлығын йә иһә уның дошмандарының иң насар, аҫтыртынлыҡ, ҡурҡаҡлыҡ, ялғанлыҡ кеүек һыҙаттарын һүрәтләгәндә, уларҙың образдарын асыу өсөн халыҡ гипербола менән бик оҫта эш иткән. Мәҫәлән, Ҡатил образына иғтибар итәйек. Уның һүрәтләнеше ҡайһы берҙә гротескҡа (сатирик һәм юмористик шаштырыу) тартым. Яуызлыҡтар ғына ҡылыусы, йөҙәрләгән ҡыҙ һәм егетте үлемгә дусар итеүсе Ҡатил эпоста шулай кәүҙәләнә:

«Бураланған дөйәләй,

Ҡанһыраған айыуҙай,

Күҙенә ҡан һауҙырып,

Күҙ ҡабағын тойҙороп,

Ужар сәсеп, мат ҡурып,

Ҡабан сусҡа елкәле,

Филдәй йыуан балтырлы,

Ҡымыҙ тулған һабалай,

Имәнес, йыуан ҡорһаҡлы,

[48] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 18-се б.
[49] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 118-се б.
[50] Башҡорт халыҡ ижады: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр/ Инеш мәҡәлә, аңлат. һәм һүҙл. авторы Н.Т. Зарипов. – Өфө: Китап, 2000. – 5 том. – 6-сы б.

Ужарынан бар халыҡтың

Башын ергә эйҙереп,

Ҡатил батша килгән, ти»[51].

Ысынлап та, Ҡатил батшаның тышҡы ҡиәфәте сатирик шаштырыу алымы ярҙамында бик уңышлы һүрәтләнгән: бураланған дөйәләй тигәндән килбәтһеҙ ҙур кәүҙәле йән эйәһе, күҙенә ҡан һауған булыуы уның сикһеҙ усаллығын, ҡанһыраған айыуҙы хәтерләтеүен, елкәһенең ҡабан сусҡаһыныҡы кеүек йәмһеҙ булыуын, балтырҙарының филдәй йыуан, ҡорһағының имәнес ҙурлығы ла эҙмә-эҙ тасуирланып, һыҙыҡ өҫтөнә алына һәм үҙенең килбәтһеҙлеге менән уҡыусыла кире ассоциация тыуҙыра.

Эпоста ҙур кәүҙәле, өсәрҙән ун икегә тиклем башлы дейеүҙәр, уларҙың ҡурҡыныс кәүҙәләре, ҡойроҡтары менән генә һуҡҡан саҡта ла бар донъяны һелкетеп, ҡая-таштарҙы онтап һалыуы, күкте утҡа сорнап, бар ерҙе һыуҙан баҫтырыуы гипербола ярҙамында һүрәтләнә.

Уралдың Ҡатил үгеҙе һәм уның батырҙары менән көрәше батырҙың сиктән тыш көслө булыуына ишаралай. Бына, мәҫәлән, эпоста егеттең үгеҙ менән көрәше нисек һүрәтләнә:

«Урал батыр буған, ти

Мөгөҙөнән алған, ти.

Тырышҡан, ти, үгеҙ ҙә,

Тырмашҡан, ти, үгеҙ ҙә,

Ысҡыналмай Уралдан,

Тубығынан батҡан, ти;

Көсөргәнеп тырышҡас,

Ауыҙынан үгеҙҙең

Ҡап-ҡара ҡан аҡҡан, ти;

Өҫкө теше төшкән, ти,

Үгеҙ хәлһеҙләнгән, ти,

Сәсәп әлһерәгән, ти»[52].

Ҡатил батшалығында, донъяны дер һелкетеп тотҡан үгеҙҙе еңдереп, халыҡ батыр егеттең шундай ҙур көскә эйә булыуын гипербола ярҙамында күрһәтә.

Беҙҙең ҡарашҡа, гипербола уңышлы ҡулланылған тағы бер момент бар: Ҡояш ҡыҙы Һомай, үҙенә йәр итеп, уға тип инселәгән Аҡбуҙатты үҙенә буйһондороп, 70 батман ауырлыҡ ташты күккә сөйә алған егетте генә һайлаясағын белдереп, оло майҙан йыя. Һомайға күҙе төшөп йөрөгән Шүлгән ат ауыҙлыҡлау түгел, хатта ташты урынынан да ҡуҙғата алмаған, ә Урал, һынауҙан да бигерәк, ағаһының бар халыҡ алдында шундай ғәрлеккә ҡалыуына йәне көйөп, 70 батман ауырлыҡ ташты:

«Йоҙроҡлап һуҡҡан, ти, –

Таш тәгәрәп киткән, ти, –

[51] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 29-сы б.
[52] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 36-сы б.

Урал алған ҡулына,

Ташты атҡан һауаға, –

Таш киткән, ти, атылып,

Күрер күҙҙән юғалып»[53].

Батыр бары кискә табан ғына ергә ҡабаттан төшөп килгән ташты һыңар ҡулы менән генә тотоп алып, кире Әзрәҡә иленә осора. Был эпизодта, беренсенән, гипербола ярҙамында эпик геройҙың көсө күрһәтелһә, икенсенән, Урал үҙенең ағаһына ҡапма-ҡаршы ҡуйыла һәм, ғөмүмән, эпос буйына Урал менән Шүлгәндең, береһенең ере, иле өсөн батырҙарса көрәше, икенсеһенең тик үҙе өсөн генә йәшәгәнлеге, киң антитик контраслыҡ менән бирелә.

Шулай уҡ эпик әҫәрҙәрҙә көс-ҡеүәт менән бер рәттән ваҡыт арауығы ла саманан тыш шаштырып һүрәтләнә. Батырҙар үҙҙәренең «елдәй етеҙ Аҡбуҙ»ҙарында йәиһә таяҡты ат итеп, «күҙ асып йомғансы», бараһы ерҙәренә барып етә:

«Бер таяҡҡа менгәндәр,

Былар юлға сыҡҡандар,

Тауҙар ашып киткәндәр,

Күҙ асып, күҙ йомғансы

Былар ҡайтып еткәндәр»[54].

Башҡорт эпосында бер әҫәрҙән икенсе әҫәргә күсеп йөрөгән юлдарҙы, поэтик деталдәрҙе, мотивтарҙы фольклористика фәнендә **«дөйөм урындар»**, **«эпик клише»** йәки «**трафареттар**» тип атап йөрөтәләр. Персонаждарҙы һүрәтләгәндә улар мөһим урын алып тора, сөнки бында сағыштырыуҙар ҙа, эпитеттар ҙа, гиперболалар ҙа бик оҫта ҡулланыла һәм уларҙың теге йәки был эпик әҫәргә килеп инеүенә халыҡ ижады әҫәрҙәрен башҡарыусы сәсәндәр сәбәпсе булған тип ҡарарға кәрәк. Халыҡтың уй-фекерен, аҡылын төйнәгән сәсәндәр үҙҙәре ижад иткәндә лә, бүтәндәр ижад иткәнде башҡарғанда ла әҙер поэтик деталдәрҙе, һүрәтләү сараларын, портреттарҙы, айырым юлдарҙы, эпизодтарҙы, мотивтарҙы ҡулланып, әҫәргә эпик колорит өҫтәй. Был ҡабатлауҙар, бер яҡтан, фекерҙе үҫтереп ебәреүгә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, хәл-ваҡиғаларҙың үҙ-ара ваҡыт арауығы үтә артып киткән эпизодтарҙы бер-береһенә бәйләп алып китер өсөн дә ярҙам итәләр. «Дөйөм урындар» ғәҙәттә алыш барған майҙандарҙы, геройҙарҙың тыуып-үҫкән ерҙәрен, шул ерҙең тәбиғәтен һүрәтләгәндә, персонаждарҙың хәл иткес хәрәкәттәрен, ҡылыҡтарын тасуирлағанда йыш ҡулланыла. Батырҙарҙың дошман менән осрашҡан мәлдә, бер-береһен яуға саҡырғанда йәиһә батырҙың ат һайлаған йәки атҡа эйә булыу өсөн ҡоролған майҙандарҙағы алыш мәлдәренә бәйле формулалар ҙа эпостарҙа мөһим урын биләй.

Урал батырға алышырға тура киләсәк яуыз Ҡатил образының эпоста бирелеүе йәки һүрәтләнеүе рәүеше.Ҡатилдың яуызлығын асыр өсөн эпос эстетикаһында өстапҡырлыҡ эҙмә-эҙлеклелек принцибы һәм ситләтеп, кинәйәләп һүрәтләү үҙенсәлекле ҡулланыла:

1) ҡарсыҡ һөйләүе аша;
2) ҡарт һөйләүе аша;
3) Урал батырҙың үҙ күҙҙәре менән күреүе.

[53] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 98-се б.
[54] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 83-сө б.

Шулай уҡ Урал батырға үҙенең ниндәй маҡсат менән юлға сығыуын, үҙенең кем икәнлеген өс тапҡыр рәттән бәйән итергә тура килә. Эпоста бер нимә хаҡында һәм бер үк образ, бер үк хәлдәр хаҡында өс тапҡыр һөйләнелгән урындар ныҡлы формулаға һәм үҙенсәлекле стилистик алымға әүрелгән. Ошоға бәйле сәсәндәрҙең һөйләү ҡеүәһе артып, уҡыусының бар иғтибары әҫәрҙә бәйән ителәсәк ваҡиғаның мөһимлегенә тыңлаусыны әҙерләй.

Ғәҙәттә, батырҙарҙың алышы өс компоненттан тора: батырҙарҙың осрашыуы, уларҙың диалогы, алыш барған мәлде һүрәтләү һәм батырҙың еңеүе. Был мотивтарҙың һәр береһе әҫәрҙә айырым йәиһә бер бөтөн эпизод рәүешендә лә килергә мөмкин. Былдай алым бөтә героик эпик әҫәрҙәргә лә хас. Мәҫәлән, «Урал батыр»ҙа батырҙың алыш мәлен ҡарайыҡ. Үҙ илендәге йоланы үтәүҙән баш тартҡан Уралға ҡаршы Ҡатил батша дүрт батырын сығара. Батырҙар Уралға килеп:

«Алышҡамы, тартышҡа? –

Һайла берҙе, – тигән, ти».

Уралдың батырҙарға яуабы:

– Үҙегеҙ әрәм бумағыҙ,

Үҙегеҙҙән көслөрәк

Берәй хайуан һайлағыҙ»[55].

Был диалогтан күренеүенсә, үҙенең көсөнә ышанған батыр ҡаршы яҡтан алышҡа көслөрәк берәй хайуан сығарыуҙы талап итә һәм артабан, әҫәрҙән күренеүенсә, ул «тауҙай үгеҙ» менән көс һынаша. Һөҙөмтәлә алыш Урал батырҙың Ҡатилды, уның дүрт батырын, үгеҙен еңеүе менән тамамлана.

«*Ай үҫәһен көн үҫкән*», «*ай киткән, ти, йыл киткән, ти*», «*ай, алышҡан, ти, йыл алышҡан, ти*», «*күп һыуҙарҙы кискән, ти, күп тауҙарҙы ашҡан, ти*», «*бергә киткән, ти былар, күп ер үткән, ти, былар*», «*юлға сығып киткәндәр, тауҙар ашып үткәндәр», «күҙ асып, күҙ йомғансы, былар ҡайтып еткәндәр*», «*көн һуғышҡан, ти, Урал, төн һуғышҡан, ти, Урал*» тибындағы, әкиәттәрҙә ҡалыплашҡан әкиәти ваҡыт берәмектәре лә сағылып ҡала эпоста. Һәм улар ваҡыт, арауыҡты үҙенсәлекле формала биреү менән бер рәттән, әҫәрҙең эпик телен байыта һәм матурлай.

Алда күрһәтелгән һүрәтләү сараларынан тыш, эпос стилендә ҙур урын алған халыҡ һөйләшенә иғтибар итәйек. Эпос халыҡтың йәнле һөйләү теленә хас булған **һүҙҙәргә, һүҙбәйләнештәргә, әйтемдәргә, мәҡәлдәргә** бай. Мәҫәлән: *кеше-маҙар, донъя-маҙар, ҡасҡан-боҫҡан, мыр-маҙар, ҡыҙ-ҡыркын, ир-ат, ҡарт-корҙар, хәл-әхүәл, ир-ҡол, ҡош-ҡорт, ир-батыр, уйлап-нитеп тормайынса, ҡойон-дауыл, ҡыран-яран, ауырыу-сырхау, аҙ-маҙ, йөҙө-башы* кеүек һәм башҡа бик күп парлы(ҡушарлы) һүҙҙәр әҫәр теленең халыҡсанлығына ишаралай. Телсе ғалимдар фекеренсә[56], парлы һүҙҙәр күп халыҡтар телендә иң боронғо ҡатламға ҡарай.

Ә инде эпостағы күп һанлы мәҡәл, әйтемдәр, тапҡыр һүҙҙәр, афоризмдар әҫәрҙең тел байлығын тулыландырыусы, текстың эмоциональ-экспрессив мөмкинлектәрен киңәйтеүсе әһәмиәтле сара булып тора. Мәҫәлән:

«Күккә лә осор – яҡшылыҡ,

Һыуға ла батмаҫ – яҡшылыҡ,

[55] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233. – 34-се б.

[56] Дмитриев Н.К. Грамматика башкирского языка/Н.К. Дмитриев. – М.– Л., 1948. – С. 74. Дегтярева Т.А. Пути развития современной лингвистики/Т.А. Дегтярева. – М.: 1964. – Т.3. – С. 136.

Утҡа ла янмаҫ яҡшылыҡ,

Телдән дә төшмәҫ – яҡшылыҡ,

Бары эшкә баш булыр,

Үҙеңә лә, кешегә

Мәңге йәшәр аш булыр»[57].

Әйтелгән һүҙҙәр ҡобайыр теленең күркәмлеген, поэтикаһының аһәңлеген билдәләй, тыңлаусыға эстетик зауыҡ бирә, әҫәрҙе халыҡсан итә. Был фекер – бар халыҡтарға ла хас яҡшылыҡ менән яманлыҡ проблемаһы – күпселек башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә ҡулланыла. «Ғөмүмән, мәҡәлдәр һәм уларға оҡшаш тапҡыр һөйләмдәр менән фекер йөрөтөү – ҡобайырҙар өсөн хас алым. Ихтимал, бөгөнгө халыҡ мәҡәлдәренең ҡайһы берҙәре ҡобайырҙарҙағы ана шул тапҡыр һөйләмдәргә, афоризмдарға ҡайтып ҡалалыр ҙа»[58]. Тюрколог Ж.Ғ. Кейекбаев билдәләүенсә, «мәҡәл һүҙе башҡорт теленә килеп кергәнгә тиклем, боронғо башҡорт телендә уның мәғәнәһен биргән төрлө һүҙҙәр (терминдар) ҡулланылған, тип ҡарарға кәрәк; мәҫәлән, бабайҙар һүҙе, боронғолар һүҙе, тапҡыр һүҙҙәр һәм, ахыр сиктә, әйтемдәр»[59].

*«Икегеҙ ҙә баламһыҙ, күҙебеҙҙең ҡараһығыҙ», «яҡшыны эскәне һыу булыр – яманды эскәне ыу булыр», «тел өҫтөндә тел ҡуймай», «батырҙан ир тарыҡмаҫ», «намыҫ тапар ир булһа, өмөтө булмаҫ көнөнән; ил быуынын һанаған, көнөн айырмаҫ төнөнән», «атанан күреп, уҡ юнып, өлкәндән күреп, яу ҡырып», «батыр атанан ҡот йыйған, матур әсәнән һөт имгән»* һ.б. тәрән мәғәнәле тапҡыр һүҙҙәр бөгөн дә халыҡтың йәнле һөйләү телендә лә, әҙәби ижадта ла айырым мәҡәл булып киң таралған. Тапҡыр һүҙҙәрҙең, мәҡәл, әйтемдәрҙең эпоста киң ҡулланылыуынан халыҡ аҡылының ни тиклем тәрән һәм зирәк икәненлеген, боронғо ата-бабаларыбыҙҙың теленең ни тиклем бай булыуына инанабыҙ.

Эпоста ара-тирә **синоним, антоним** кеүек саралар ҙа осрай. Мәҫәлән:

«Икәүҙән-икәү шул ерҙә

Башлап *ғөмөр һөргәндәр,*

Тора-бара у икәү

*Ике уллы ла буғандар.*

Шүлгән буған олоһо,

Урал буған кесеһе;

Бүтән кеше күрмәйсе,

Тик *йәшәгән* дүртәүһе,

Донъя-маҙар йыймаған,

Ҡашыҡ-аяҡ тотмаған,

Ҡаҙан аҫып, ут яғып,

Алар донъя көтмәгән»[60].

[57] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 130-сы б.
[58] БХИ. 1 том. 1954. – 1-се б.
[59] Кейекбаев Ж.Ғ. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы/ Ж.Ғ. Кейекбаев. – Өфө, 1996. – 227-се б.
[60] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 2-се б.

Был миҫалда *«гөмөр һөргәндәр», «ике уллы ла булғандар», «йәшәгән»,* һәм *«донъя-мағар йыймаған, ҡашығаяҡ тотмаған, ҡаҙан аҫып, ут яғып, алар донъя көтмәгән»,* һүҙҙәре һәм һүҙбәйләнештәре синонимик мәғәнәгә эйә булып, был ҡарт менән ҡарсыҡтың ғүмер итеү рәүешен бәйән итә. Йәиһә эпоста *көнөн-төнөн, утын-һыуын, эреһе-вағы, осо-ҡырыйы, уйын/көлкө – илау/һыҡтау* кеүек антоним ишле ҡуш һүҙҙәр образлылыҡ тыуҙырыуҙа, ҡобайыр динамикаһын сағылдырыуҙа мөһим роль уйнай. *«Йоланан да ҡурҡмайым, үлемдән дә өркмәйем», «ҡан илаған әсәләр, һыҡтап торған аталар», «ҡомһарланып, таш төйөп», «барыһы ла ҡуҡҡә баҡҡан, ти», «барыһы ла ҡарашҡан»* кеүек лексик синонимдар ярҙамында геройҙарҙың физик хәл-торошо һүрәтләнә.

Рифмаларҙың эпосты йәнле һөйләү теленә яҡынайтҡан бик үҙенсәлекле төрҙәре осрай:

1. «Йыртҡыс йәнлек *тотто иһә,*

Йәнлек иркәк *булды иһә...»*

2. «Үлем килә *калды иһә,*

Килеп ҡулын *һалды иһә».*

3. «Һомайҙы ла *көтмәйсе,*

Самрауға ла *әйтмәйсе...»*

4. «Ҡайғы баҫты *йөҙөнө,*

Миңдәр баҫты *битене...»*

5. «Миңә һөйлә *серене,*

Миңә әйт һин *барыны».*

Эпоста шулай уҡ, ҡобайыр жанрына хас стилистик алым булараҡ, **ҡабатлауҙар** йыш осрай. Ғилми әҙәбиәттә ҡабатлау шиғри телмәргә хас стилистик алымдарҙың береһе, шиғырҙағы айырым һүҙҙәрҙең мәғәнәүи әһәмиәтен арттырыу һәм шиғри ритм һаҡлау өсөн ҡулланыла[61]. Ҡабатланған һүҙҙәр юлдарҙың башында ла, аҙағында ла килеүе күҙәтелә. Мәҫәлән:

1. «*Утҡа* ҡаршы *ут булыр,*

*Һыуға* ҡаршы *һыу булыр,*

*Елгә* ҡаршы *тау булыр*

*Яуға* ҡаршы *яу булыр...»*[62]

Был поэтик ҡабатлауҙар тасуирлау функцияһын үтәп, юлдарҙың бөтөнлөгөн тәьмин итә, төп фекерҙе конкретлаштырып бирә.

Шулай итеп, башҡорт халҡының эпосы «Урал батыр» башҡорт йәнле һөйләү телмәрен, гипербола, синоним, антоним, гротеск, ҡабатлау һ.б. күп сараларҙы үҙендә туплаған бай стилле әҫәр булып тора. Эпостағы теге йәки был һүрәтләү сараһы ул үҙмаҡсат, телде биҙәү өсөн генә ҡулланылған һүҙ түгел, ә эпостың идея йөкмәткеһен, образдарын тәрәнерәк һәм аныҡыраҡ асыу, артабанғы үҫешен күрһәтеү өсөн ярҙам итә.образдарын тәрәнерәк һәм аныҡыраҡ асыу, артабанғы үҫешен күрһәтеү өсөн ярҙам итә.

[61] Галин С.А. Тел аҫҡысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге/ С.А. Галин. – Өфө: Китап, 1999. – 2-се баҫма. – 133-сө б.
[62] ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.– 128-се б.

**Әҙәбиәт**

АМИНЕВ, З. Г. (2005). Космогонические воззрения древних башкир/З.Г. Аминев. – Уфа: Башлингвоцентр.

Башҡорт халыҡ ижады: Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр, иртәктәр/ Инеш мәҡәлә, аңлат. һәм һүҙл. авторы Н. Т. Зарипов. – Өфө: Китап, 2000. – 5 том.

БЕЛИНСКИЙ, В. Г. (1953). Полное собрание сочинений в 13 томах/В.Г. Беленский. – М.,. – Т. 3.

БУХАРОВА, Г. Х. (2003) О происхождении мифотопонима «Шульган»/ Г.Х. Бухарова // Ватандаш. – № 11. – С. 139-143.

БХИ. 1 том. 1954..

ВЕСЕЛОВСКИЙ, А.Н. (1989). Историческая поэтика/А.Н. Веселовский. – Москва.

ҒА, ф. 36, оп. 12, д. 233.

ГАЛИН, С. А. (1999). Тел асҡысы халыҡта. Башҡорт фольклорының аңлатмалы һүҙлеге/ С.А. Галин. – Өфө: Китап.– 2-се баҫма.

ГОРДЛЕВСКИЙ, В. (1909). Из наблюдений над турецкой песнью. Оттиск из этнографического обозрения. – Кн. 79.

ДМИТРИЕВ, Н. К. (1948). Грамматика башкирского языка/Н.К. Дмитриев. – М.– Л.

ДЕГТЯРЕВА Т. А. (1964). Пути развития современной лингвистики/Т.А. Дегтярева. – М.:. – Т. 3.

ӘМИНЕВ, З. Г. (1996). Башҡорт халыҡ ижадында Яйыҡ образы/З.Г. Әминев//Ағиҙел. – № 3.

ӘХМӘТЙӘНОВ, К. Ә. (2003). Әҙәбиәт теорияһы/К.Ә. Әхмәтйәнов. – Өфө: Китап.– 3 баҫма.

КЕЙЕКБАЕВ, Ж. Ғ. (1996). Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы/ Ж.Ғ. Кейекбаев. – Өфө.

КЕКИЛОВ, А. (1975). Сөз сырлары/А. Кекилов. – Ашгабат: Ылым.

КИНЬЯБУЗОВА, А., ХАЗИЕВ, В. (2003). Космос и хаос в башкирской мифологии/ А. Кииньябузова, В. Хазиев//Ватандаш. – 9.– С. 182.

КИРЕЕВ, А. Н. (1976). Некоторые художественные особенности кубаирского стиха/ А.Н. Киреев// Фольклор народов СССР. – Уфа. – С. 10.

КОВАЛЬСКИЙ, Т. Исследование о форме поэзии тюркских народов. Фонды Отделения общественных наук при АН Киргизской ССР, инв. № 171.

КОРШ, Ф. Е. (1909). Древнейший народный стих турецких племен/Ф.Е. Корш. – СПб.

КУН, Н. А. (2000). Легенды и мифы древний Греции/Н.А. Кун. – СПб.: Кристалл.– С. 115.

КЫДЫРБАЕВА, Р. З. (1980). Генезис эпоса «Манас»/Р.З. Кыдырбаева. – Фрунзе: Илим.

МЕЛЕТИНСКИЙ, Е. М. (1968). «Эдда» и ранние формы эпоса/Е.М. Мелетинский. – М.: Наука, 1968.

МЕЛЕТИНСКИЙ, Е.М. (1963). Происхождение героического эпоса. Ранние формы и архаические памятники/Е.М. Мелетинский. – М.: Изд-во вост. лит.

МОКИЕНКО, В. М. (1986). Образцы русской речи: Историко-этимологические и этнолингвистические очерки фразеологии /В.М. Мокиенко. – Л.

ПЕРВОВ, П. Д. Эпитеты в русских былинах. Оттиски из «Филологических записок» за 1901 и 1902 г/П.Д. Первов. – Воронеж. – 44 с.

ПОЦЕЛУЕВСКИЙ, А. П. (1943). Метрика произведений Махтум-Кули/А.П. Поцелуевский. – Ашхабад: Совет адабияте. – № 4-5.

ПРОПП, В. Я. (1958). Русский героический эпос/В.Я. Пропп. – М.– 2-ое изд.

РАДЛОВ, В. (1870). Предисловие к книге «Образцы народной литературы тюркских племен, живущих в Южной Сибири, Джунгарской степи»./В. Радлов. – СПб: Киргизское наречие– Ч. 3. – С. 13-26.

САГАЛАЕВ, А. М. (1991). Урало-алтайская мифология/А.М. Сагалаев.

ХӘКИМОВА, В. Ш. (1994). Башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәрендә сағыштырыуҙар / В.Ш. Хәкимова // Туған тел һәм әҙәбиәт: конф. тезис. – Өфө.

ХИСАМИТДИНОВА, Ф. Ғ. (2002). Башҡорт мифологияһы. Белешмә-һүҙлек/ Ф.Ғ. Хисамитдинова. – Өфө: Ғилем.

ХӨСӘЙЕНОВ, Ғ.Б. «Урал батыр» эпосының поэтикаһы /Ғ.Б. Хөсәйенов//Ватандаш. – 2003. –9. – 129-150-се б.

ХӨСӘЙЕНОВ, Ғ. Б. (2003). Башҡорт халҡының рухи донъяһы/Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Китап.

ХУСАИНОВА, Г. Р. (2000). Поэтика башкирских сказок/Г.Р. Хусаинова. – М.